*Әхмәтгәрәй ЙӘНҒӘЛИН,*
*тарих фәндәре кандидаты*

# ТАРИХ ШИК ТЫУҘЫРҒАНДА

Төбәк тарихы — ил тарихы. Әһәмиәткә эйә булған тарихи ваҡиғалар ҙур ҡалаларҙа ғына түгел, күбеһенсә төбәктәрҙә башлана һәм бөтә илгә йоғонто яһай.

Тыуған төйәккә бағышланған мәҡәләләрҙең, китаптарҙың әһәмиәтен баһалап бөтөрлөк түгел. Уларҙа дәреслектәргә инмәй ҡалған мөһим тарихи хәлдәр, яңы исемдәр, мәғлүмәттәр бар. Улар уҡыусы балаларға ил тарихын тәрәнерәк үҙләштерергә ярҙам итә. Төбәк тарихының тәрбиәүи әһәмиәте лә ҙур. Ауыл һәм район тарихын уҡып, үҙләштереп, тыуған төйәгенең тарихын, атай-олатайҙарҙың азатлыҡ өсөн көрәшен, боронғо көнкүрешен, халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен белгән бала ғына ысын башҡорт булып үҫә.

Айырым райондар тарихына килгәндә, 1993—2001 йылдар эсендә генә егерменән ашыу тарихи хеҙмәт баҫылып сыҡты. В.И. Ишбулдин тарафынан яҙылған «Тыуған яғым Ҡалтасы ере» тип аталған тарихи очерк баҫылды, «Благовар яғы — мул һәм иркен яҡ» һәм «Дүртөйлө ерендә» тип аталған китаптар донъя күрҙе. Миңниса Баһуманованың Федоровка районының 60 йыллығына арналған, Шәриф Тереғоловтың «Шишмә — минең тыуған яғым» тип аталған йыйынтыҡтар нәшер ителде.

Шәриф Тереғолов төрлө мәғлүмәттәргә һәм архив материалдарына таянып, район тарихының һәр дәүерен, боронғо ауылдарҙың барлыҡҡа килеүен һүрәтләргә тырышҡан. Яңыраҡ барлыҡҡа килгән ауылдар тураһында ла етерлек мәғлүмәттәр бар.

Китапта совет власы дәүерендә булып үткән тарихи хәлдәр, күренештәр һәм ваҡиғалар ҙа сағылдырылған. Ләкин был ваҡиғаларға автор иҫке күҙлектән ҡарай. Кем совет власы өсөн көрәшкән, ҡыҙылдар яҡлы булған — шулар һәйбәт кеше. Әгәр ҙә революцияны һәм совет власын ҡабул итмәгән, аҡтар яғында булған, колхоз системаһын ҡабул итмәгән икән — ул дошман. Колхозлаштырыу тарихын һүрәтләүҙә, баһалауҙа ла автор коммунистик ҡараштa ҡалған. Әйтерһең дә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма комитетының 1930 йылдың 8 ғинуарындағы ҡарары, киң күләмдә репрессив саралар ҡулланыу булмаған, урта хәлле, хатта ярлы хужалыҡтарға «кулак» һәм «подкулачник» ярлығы тағылмаған, колхозға керергә теләмәгән ғаилә башлыҡтары ҡулға алынып атып үлтерелмәгән, һөр-

гөнгә оҙатылмаған, мөлкәттәре тартып алынмаған. Золом дәүерендә халҡы бик ҙур зыян күргән, хатта "кулак районы" тип күрһәтелгән был районда репрессияға дусар ителгән кешеләр тураһында бер һөйләм дә юҡ китапта!

Тарихсы тарихты дөрөҫ яҡтыртырға тейеш. Ысынбарлыҡтағы тарихи ваҡиғаларҙы, тарихи хәлдәрҙе йәшереп ҡалдырырға һәм ялған баһа бирергә уның хаҡы юҡ. Күренекле тарихсылар тарихи дөрөҫлөктө боҙоуға, йәшерергә маташыуға ҡырҡа ҡаршы булған. «Тарихҡа эпиграф итеп мин былай тип яҙыр инем — «бер нәмәне лә йәшермәм», — тигән бөйөк аҡыл эйәһе Лев Толстой. Ә XVI быуат аҙағында—XVII быуат башында йәшәгән бөйөк испан яҙыусыһы Мигель Сервантес былай тип яҙған: «Тарих — ул беҙҙең хәрәкәт хазинабыҙ, ул үткәндәрҙең шаһиты, бөгөнгөләргә өгөт, нәсихәт, киләсәк өсөн һаҡ булырға ҡушыу, киҫәтеү. Ялған тарихсыларҙы ялған аҡса яһаусылар кеүек язалап үлтерергә кәрәк ине».

1998 йылда Баймаҡ, Нуриман, Учалы райондары тарихы буйынса китаптар донъя күргән. Баймаҡ районы тарихына арналған хеҙмәт «Баймаҡ ере тураһында хикәйә» тип атала. Ю. Узиков йыйылған материалды китапҡа уңышлы ғына урынлаштырған, төркөмләштергән, райондың тарихи юлын күҙ алдына килтерә алған, райондан сыҡҡан күп кенә күренекле шәхестәр менән таныштырған.

Ләкин Ю. Узиков, Шишмә тарихсыһы Ш.А. Тереғолов кеүек үк, тарихҡа шул уҡ коммунистик күҙлектән ҡарай. Автор совет власын ҡабул итмәгән кешеләрҙе яратмай. Башҡорт халҡының палачтары — Смоленск полкының һалдаттары ерләнгән урынды «братская могила красноармейцев Смоленского полка» тип атай.

Шишмә тарихсыһы кеүек үк, Ю.Узиков коллективлаштырыу осоронда, 1937 йылда һәм башҡа йылдарҙа репрессияға дусар ителгән башҡорттарҙы күрмәй. Баймаҡ районы йөҙәрләгән иң аҫыл ирҙәрен һәм егеттәрен юғалтҡан. Миҫал өсөн ике Этҡол ауылын ғына алайыҡ. Төрлө йылдарҙа НКВД кешеләре ошо ике ауылдан ағалы-ҡустылы Азаматовтарҙан 9 кешене ҡулға алған. Ҡулға алыныусылар араһында шул ауылдарҙа йәшәгән Әминевтар фамилияһы ла йыш осрай. Сәитбаттал ауылынан репрессияға Абдулов Нурғәли, Абдулов Талха, Абдулов Хәйрулла, Абдулов Хәбиб һәм башҡалар дусар ителгән.

Нуриман районы тарихына арналған китап та нәшер ителде. Китаптың авторы — элекке тарих уҡытыусыһы Ришат Исмәғилов. Китаптың айырым бүлектәре революция, граждандар һуғышы, нэп һәм колхозлаштырыу осорҙарына, Бөйөк Ватан һуғышы, һуғыштан һуңғы осорҙарға бағышланған. Репрессияға дусар ителгән кешеләрҙе лә автор онотмаған. Ғөмүмән, район тарихын өйрәнгәндә лә, яҙғанда ла Ришат ағай Исмәғилов тарихи дөрөҫлөккә тоғро булып ҡалған. Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: уҡытыусы булараҡ, Ришат ағай китабының алты бүлеген халыҡ мәғарифына бағышлаған, райондағы мәҙәниәт усаҡтары тураһында матур итеп яҙған. Автор райондан сыҡҡан күренекле шәхестәрҙе телгә алған, уларҙың исемлектәрен төҙөгән. Нуриман ере илебеҙгә 34 фән докторын һәм кандидатын биргән икән. 44 кеше төрлө маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булған, 25 кеше халыҡ депутаты исемен йөрөткән һәм йөрөтә икән, ә 8 кеше республикабыҙҙың юғары органдарында эшләгән һәм эшләй. Шулай итеп, Ришат ағай Исмәғиловтың бик күп көс һалған хеҙмәте киләсәктә район тарихын яҙыусыларға өлгө булып торорлоҡ.

1998 йылда Учалы районы тарихы ла донъя күрҙе. Райондың тарихын Рысай ауылынан тарихсы

Әлим Барый улы Зарипов яҙған. Уның ҙур күләмле һәм тәрән йөкмәткеле хеҙмәте «Эй Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт» тип атала. Автор район, Башҡортостан тарихына, ғөмүмән, тарихҡа өр-яңы күҙлектән ҡарарға, теге йәки был тарихи ваҡиғаға, хәлгә, тарихи күренештәргә ҡарата шәхси фекерҙәрен төплө рәүештә иҫбатларға тырышҡан, район тарихына ҡағылышлы хәл-ваҡиғаларҙы тарихи дөрөҫлөк принцибынан сығып яҡтыртҡан. Юҡҡа ғына китаптың ҡульяҙмаһына Башҡорт дәүләт университеты профессоры Рим Йәнғужин ыңғай рецензия яҙмағандыр. Инеш һүҙҙән һәм дүрт бүлектән торған был хеҙмәт район тарихының системалы курсы булып тора. Китап өҫтөндә эшләгәндә автор 40-тан ашыу тарихи хеҙмәттә, документаль йыйынтыҡтарҙа тупланған һәм район тарихына ҡағылған белешмәләрҙе, Өфө, Силәбе һәм Троицк ҡалалары архивтарында һаҡланған материалдарҙы киң ҡулланған, уларҙың күбеһен фәнни әйләнешкә тәү башлап индергән. Әлим Зариповтың был хеҙмәте — фәнни хеҙмәт, ул район тарихын яҙыусыларға өлгө булып торорлоҡ.

1999 йылда Йәрмәкәй һәм Илеш райондары тарихына бағышланған китаптар нәшер ителде. Был китаптар ҙа, башҡа ошондай уҡ хеҙмәттәр кеүек, белгестәр тарафынан баһаланмай ҡалған. Һәр хәлдә, уларға фәнни баһа биреп яҙылған мәҡәләләр республика гәзиттәрендә күренмәне.

«Йәрмәкәй ерендә» тип аталған китапты яҙыуҙа ҙур коллектив ҡатнашҡан, шул иҫәптән ике тарихсы. Райондың тарихы өс бүлектә яҡтыртыла. Беренсе бүлеге «Ыҡ йылғаһы буйындағы археологик ҡомартҡылар һәм йәшәгән халыҡ» тип атала. Икенсе бүлектә һүҙ районда 1917—1920 йылдарҙа булып үткән ваҡиғалар һәм тарихи хәлдәр тураһында бара. Өсөнсө бүлек «Ышаныстар, уңыштар дәүере һәм өмөттәрҙең өҙөлөү дәүере» тип атала. Был бүлектә районда 1921—1998 йылдарҙа булып үткән ваҡиғалар тураһында һүҙ бара. Китаптың ҡалған урынын райондың бөгөнгө тарихы алып тора. Авторҙар райондағы төрлө предприятиелар, ойошмалар һәм дәүләт учреждениелары тураһында һүҙ алып бара. Хатта райондың янғындан һаҡлау отрядының тарихы менән танышып була. Айырым бүлектәр спортҡа, мәғарифҡа, матбуғат, һаулыҡ һаҡлау учреждениеларына, халыҡта йәшәй килгән традицияларға, райондың күренекле шәхестәренә бағышланған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, авторҙар тарихи дөрөҫлөккә тоғро булып ҡала алмаған. Улар граждандар һуғышы һәм коллективлаштырыу осорҙарында халыҡтың кисергән фажиғәләренә иғтибар итмәҫкә тырышҡан. Әйтерһең, 1921 йылда район халҡы аслыҡтан ҡырылмаған, 1932—1933 йылдарҙағы аслыҡ та район халҡын урап үткән, һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла район халҡы бер ниндәй ҙә ауырлыҡ кисермәгән, ярым ас йөрөп колхоз-совхоз йөгөн тартмаған, түҙгеһеҙ һалымдар түләмәгән, аяуһыҙ таланмаған!

Күрһәткән тарихи хәлдәрҙе, халыҡ кисергән ауырлыҡтарҙы сағылдырмау авторҙарҙың абруйын арттырмай. Ошо урында XVI быуат аҙағында — XVII быуат башында йәшәгән бөйөк инглиз философы Фрэнсис Бэкондың бөтә тарихсылар өсөн яҙып ҡалдырған васыятын иҫкә төшөргө килә: «Тарих яҙыу өсөн үткән дәүер һулышын тойоу, дәүерҙәр алмашыныуын ентекләп өйрәнеү һәм аңлау, тарихты иркен итеп һәм бер хәлде лә, бер тарихи ваҡиғаны ла йәшереп ҡалдырмай, дөрөҫ итеп яҙыу өсөн иҫ киткес көс түгергә, тәрән мәғәнәле булырға кәрәк».

1999 йылда баҫылып сыҡҡан «Илеш таңдары» тип аталған ҡыҫҡаса тарихи очерк та шул уҡ рәүештә яҙылған.

2000 йылда, күп районлар 70 йыллығын киң билдәләгәндә, Бөрйән, Күгәрсен, Ҡыйғы, Мәләүез, Мәсетле, Стәрлебаш, Учалы һәм Хәйбулла районлары тарихына бағышланған хеҙмәттәр баҫылып сыҡты. Был хеҙмәттәр төрлө профессия кешеләре тарафынан һәм төрлө кимәлдә яҙылған. Шуларҙың ҡайһы береһендә туҡталып китәйек.

2000 йылда Бөрйән районы тарихына, уның күренекле шәхестәренә арналған бер юлы ике хеҙмәт донъя күргән. Береһе «Атайсал— Бөрйән ере» тип атала. Уны билдәле шағир һәм журналист Инсур Йәһүҙин төҙөгән. Икенсе китап «Бәхетле булығыҙ, таулылар» тип атала. Китаптың авторы — күренекле журналист Марсель Ҡотлоғәлләмов. Ике китап та рус телендә нәшер ителгән.

И.Йәһүҙиндың хеҙмәтенә күҙ һалайыҡ. Китап инеш һүҙҙән һәм биш бүлектән тора. Тәүге бүлек «Тарих аҙымдары» тип атала. Бүлектең башында автор өс һөйләм менән Бөрйән ырыуы тарихын аңлатып бирергә тырышҡан һәм, профессор Ә.Әсфәндиәров материалдарына таянып, Бөрйән районына ингән ауылдарҙың барлыҡҡа килеү тарихына ҡыҫҡаса ғына туҡталған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, автор бик күп ауылдарҙы хатта телгә лә алмаған. Шулар араһында Аралбай, Бикбаш, Ҡолғона, Ҡыҫыҡ, Ҡартүлгән, Иҫәнгазы, Йәрмөхәмәт, Яҡшығол, Шахморат, Һөйөш һәм башҡалар. Икенсенән, автор бик күп ауылдарҙы үтә «йәшәртеп» ебәргән. Китаптан күренеүенсә, районда йәшәп килгән ауылдар йә XVIII быуат башында, йә уртаһында, йә XIX быуат башында барлыҡҡа килгән. Был дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, Кейекбай тәүҙә Баштире тип аталған, һәм ошо исем аҫтында бәлки быуаттар буйы йәшәгәндер. Йәнбикә өләсәйем миңә: «Балам, беҙҙең ауыл иң боронғо ауылдарҙың береһе һәм беҙҙең нәҫел ябай ғына нәҫел түгел», тип әйтә торғайны. Боронғо замандарҙа Көтан ауылы — Мәсетле, Мәҡсүт ауылы Ыуашыш тип аталған. Яңы Собханғол ауылы бөгөн дә ике исем аҫтында йөрөй. Икенсе исеме Йәнһары, ә элегерәк Ҡомйылға булған. Иҫке Мөсәт элек Саҡмағош тип аталған. Өсөнсө исеме — Монаш. Китапта телгә алынмаған Иҫәнгазы ауылы элек Күскәрбәк тип йөрөтөлгән. Яуымбай ауылының элекке исеме — Ҡайын өй. Моранҙым ауылы әүәл Имес, Аратау, Әптүшкә исемләнгән. Автор, Аҡбулат ауылына 1816 йылда хәҙерге Баймаҡ районына ингән Сыңғыҙ ауылы кешеләре нигеҙ һалған, тип яҙған. Был дөрөҫ түгел. Аҡбулат ауылына Аҡбулат бей нигеҙ һалған. Ә Аҡбулат бей легендар Мәсем хандың кәңәшсеһе, уң ҡулы булған. Күренеүенсә, халыҡ хәтерендә, легендаларҙа һаҡланған мәғлүмәттәрҙе белмәй тороп, тик башҡа кеше тапҡан материалдарға таянып ҡына ауылдар тарихын, район тарихын яҙып булмай.

Бүлектең икенсе өлөшө «Бөрйән районы 30-сы йылдарҙа» тип атала. Ләкин унда һүҙ нигеҙҙә 20-се йылдар тураһында бара. Һуңынан автор бер-нисә һөйләм менән генә үҙ уҡыусыларын Бөрйән районының барлыҡҡа килеүе тарихы менән таныштырған һәм, ниндәйҙер материалдарға таянып, районның 30-сы йылдар башындағы хәлен яҡтыртырға маташҡан. Китаптың 13-се битендә район ойошторолған саҡта район башҡарма комитетында эшләгән С.Д. Юлсуриндың фотоһүрәтен урынлаштырған һәм аҫтына «Бөрйән район исполкомының беренсе рәйесе С.Д. Юлсурин» тип яҙып ҡуйған. Китаптың 63-се битендә ошо фекерҙе автор үҙенсә иҫбатлап, ныҒыта. Китапты уҡып сыҡҡан һәр бер кеше, район башҡарма комитетының беренсе рәйесе С.Д. Юлсурин булған икән, тип уйлаясаҡ. Ләкин был дөрөҫ түгел. Халыҡ депутаттарының Бөрйән

район башҡарма комитетының беренсе рәйесе Ғәбитов Мәүлетбай Сафиулла улы булған. Ул 1896 йылда хәҙерге Ырымбур өлкәһенә ингән Әбйәлил ауылында донъяға килгән. Ә С.Д. Юлсуринға килгәндә, ул район ойошторолған саҡта район башҡарма комитетының ер бүлеге мөдире булып эшләгән. Китаптың авторы хатта уның исемен, атаһының исемен дә дөрөҫ итеп яҙмаған. Китапта «Султан Давлеткирдеевич Юлчурин» тип яҙылған. Ысынында иһә уның исеме Солтан-Гәрәй Дәүләткирәй улы Юлсурин. ВКП(б)-ның Бөрйән район комитетының беренсе сәркәтибе Вәлиев менән дә шул уҡ хәл. ВЛКСМ-дың район комитетының беренсе сәркәтибе, Баймаҡ районы егете Шаһип-Гәрәй Әхмәтйән улы Биксурин булған. Ләкин уның тураһында китапта бер һүҙ ҙә юҡ.

Китаптың 15-се битендә 30-сы йылдарҙа булып үткән ваҡиғаларҙан автор еңел генә 90-сы йылдарға күскән һәм ни өсөндөр «Бөрйән урман сәнәғәте хужалығы» тип аталған акционерҙар йәмғиәте тарихын яҡтырта башлаған, ә китаптың 18-се битендә көтмәгәндә, бер ниндәй инеш һүҙһеҙ, 1937 йылғы репрессиялар тураһында яҙа башлаған. Уның раҫлауынса, 1937 йылда районда ни бары 8 кеше генә репрессияға дусар ителгән. Был да тарихи дөрөҫлөккә тап килмәй. Репрессиялар районда киң йүнәлеш алған, уның ҡорбандары һәр ауылда булған. Мәҫәлән, Тимер ауылынан ҡулға алынғандар араһында булғандар: Аҡназаров Зәйнулла, Аллабирҙин Ибраһим, Аллабирҙин Мазһар, Аллабирҙин Нәжмитдин, Аллабирҙин Фәтҡулла Нәжмитдин улы, Аллабирҙин Фәтҡулла Низаметдин улы, Алтынбаев Зәкәриә, Алтынбаев Фәтҡулла, Алтыншын Ғибәҙитдин һәм башҡалар. Кейекбайҙан ундан ашыу кешене ҡулға алғандар. Шулар араһында Алтыншин Лотфулла, Алтыншин Нурмөхәммәт, Алтыншин Ырыҫ-Мөхәммәт, Алтыншин Фитрат, Алтыншын Фәйзулла, Алтыншин Ханнан, Алтыншин Хәбир, Ҡарабаев Тимерғәли һәм башҡалар. Ырыҫ-Мөхәммәт Алтыншин олатайға 80 йәш булған. Уны 1931 йылдың 5 ғинуарында Белорет төрмәһендә атып үлтергәндәр. Ә Иҫке һәм Яңы Собханғол ауылдарында донос яҙыусылар ниңәлер Ҡолдәүләтовтарҙы күрә алмағандар. 1932—1937 йылдарҙа биш ағалы-ҡустылы Ҡолдәүләтовтарҙы ҡулға алғандар. Ҡайһы бер донос яҙыусыларҙың исем-фамилиялары мәғлүм.

Акционер йәмғиәтенең тарихын бөгөнгө көнгә хәтле килтереп еткереп, китаптың 20-се битендә автор тағы 1965 йылда булып үткән ваҡиғаларға кире ҡайтҡан һәм Бөрйән урман хужалығы тарихын күҙәтеп сыҡҡан. Китаптың 22-се битендә автор бөгөнгө көн ваҡиғаларынан тағы 1927—1931 йылдарға әйләнеп ҡайтҡан һәм «Уңыш теләйем һиңә, ауыл кешеһе» тип аталған бүлектә районның ауыл хужалығы тарихына күҙ йөрөтөп сыҡҡан. Ләкин был бүлектә автор районда коллективлаштырыу тарихын бөтөнләй урап үткән. Һуңынан 1927—1931 йылдарҙан ул Бөйөк Ватан һуғышы осорона күскән. Ә Бөйөк Ватан һуғышы осоронан тағы 1938 йылда булып үткән ваҡиғаларға кире ҡайтҡан һәм китаптың аҙаҡҡы битенә хәтле тарихи ваҡиғаларҙы автор бына ошолай буталсыҡ рәүештә һүрәтләгән.

Тарих яҙыуҙың үҙ ҡанундары бар. Тарихсыға һәр тарихи күренеште, ваҡиғаны, тарихи хәлде ниндәй ҙа булһа үҙгәрештә, үҫештә, йә булмаһа артҡа китеүҙә, сигенеүҙә ҡарау фарыз, уларҙың килеп сығыуының һәм юҡҡа сығыуының сәбәптәрен эҙләргә, аңлатырға кәрәк. Историзм принципы тарихсыға тарихтың ағышын, тарихи барышты, тарихи процестарҙы, ваҡиғаларҙы замандарға, дәүерҙәргә, осор-

ҙарға бүлеп, хронологик рәүештә, бер-бер артлы бирергә ҡуша. Илдең тарихы, шул иҫәптән Башҡортостан тарихы, тарихсылар тарафынан күптән инде дәүерҙәргә, осорҙарға бүленгән. 1917—1941 йылдарҙа булып үткән тарихи ваҡиғалар ҙа, һуғыштан һуңғы йылдарҙа (1945—2002 йылдар) булып үткән тарихи ваҡиғалар ҙа айырым тарихи осорҙарға бүленгән. Тарихи ваҡиғаларҙы кем нисек бүлгән — икенсе мәсьәлә. Ләкин тарихсыларҙың күбеһе ҡабул иткән бүлеү бар. Тарих яҙған кеше быны белергә тейеш. Тарихи ваҡиғаларҙы дәүерҙәргә, осорҙарға бүлмәй тороп тарихты яҙып та, өйрәнеп тә, белеп тә булмай. Тарихсы булмай тороп тарих яҙырға маташҡан кешеләр быны аңларға тейеш.

Тарих яҙғанда, әлбиттә, тарихи тәнҡит тә үҙ урынын алырға тейеш. Тарихсы шикһеҙ хәлде, фактты ялған, алдаҡ, уйҙырма хәлдән айыра белергә тейеш, ә бының өсөн тарихи хәлдәрҙе, ваҡиғаларҙы ҡат-ҡат тикшереп сығырға, тик ышаныслы, шикһеҙ тарихи сығанаҡтарға ғына таянырға тейеш. Быларҙың береһе лә Инсур Йәһүҙиндең китабында юҡ. Район тарихының хроникаһын төҙөп сығыу ҙа тарихты үтә ябай рәүештә һөйләп биреү ул. Шуның өсөн тарихсы алдында торған бурыс — район тарихын район халҡына үҙгәреш, үҫеш рәүешендә күрһәтеү, тарихи дөрөҫлөккә тоғро булып ҡалыу, тарихи ысынбарлыҡты йәшермәү, тарихи ваҡиғаларҙы дәүер, осорҙарға бүлеп, аңлатып биреү. Һәр тарихи ваҡиғаны, күренеште тик үҙ заманы, үҙ ваҡыты ысынбарлығы аша ғына дөрөҫ аңлап, уларға дөрөҫ баһа биреп, һәр тарихи ваҡиғаны тик башҡа ваҡиғалар менән бәйләнештә генә тулыһынса аңлап була.

2000 йылда нәшер ителгән Стәрлебаш районы тарихы менән дә шул уҡ хәл. Район тарихын М.Мәхмүтов яҙған. Үҙен тарихсы тип йөрөтһә лә, автор бөтә булған ваҡиғаларҙы бергә бутаған, тарихи дөрөҫлөккә тоғро булып ҡала алмаған. Миҫал өсөн китаптың дүртенсе бүлеген алайыҡ. Бүлектең башында һүҙ 1812 йылғы Ватан һуғышы хаҡында бара. 1812 йылдан автор 1918—1920 йылдарға күсә һәм Башҡорт АССР-ның барлыҡҡа килеүен һүрәтләй. Шунан һуң граждандар һуғышы осорона күсеп, көтмәгәндә бүлеккә «Муса Йәлил беҙҙең яҡтарҙа» тип аталған материал урынлаштыра. Һуңынан райондан граждандар һуғышында ҡатнашҡан, район ерендә совет власын урынлаштырған кешеләрҙең исемлеген, октябрь революцияһының 50 йыллыҡ юбилейы хөрмәтенә орден һәм миҙалдар менән бүләкләнеүселәрҙең, Ҡалҡаш волость башҡарма комитеты ағзаларының исемлеген урынлаштырған. Һуңынан автор тағы 1918 йылға ҡайтып, 1918 йылдың 1 майында булып үткән митинг тураһында материал урынлаштырған һәм аҙаҡ 1921 йылғы aслыҡ тураһында яҙған.

Бишенсе бүлек «Беҙҙең яҡташтарыбыҙ — данлыҡлы шәхестәр» тип атала. Бүлектә һүҙ Емельян Пугачевтың атаҡлы полковнигы Ҡаранай Моратов тураһында һәм, ни сәбәптәндер, М.Солтанғәлиев тураһында бара. Әйтерһең дә Солтанғәлиевтың Башҡортостан тарихына ниндәй ҙә булһа ҡағылышы бар.

Алтынсы бүлектә автор 1773—1775 йылдарҙағы ваҡиғаларҙан ҡапыл 1918—1930 йылдарға күсеп, районда большевиктар фирҡәһенең һәм комсомол ойошмаларының барлыҡҡа килеүе хаҡында яҙа. Стәрлебаш райкомында беренсе (яуаплы) сәркәтип булып эшләгән кешеләрҙең исемлеге урынлаштырылған. Шул исемлектә Чербаев Нафиҡ Латип улының да исеме бар. Имеш, ул 1929—1930 йылдарҙа Стәрлебаш райкомында яуаплы сәркәтип булып эшләгән. Был дөрөҫ

түгел. Беренсенән, 1929 йылда Стәрлебаш райкомы әле булмаған. Икенсенән, Стәрлебаш районының Йомағужа тигән башҡорт ауылында донъяға килгән Нафиҡ Чербаев 1929—1930 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт иткән. Хеҙмәт итеп ҡайтҡас ВКП(б)-ның Ҡалҡаш волкомының яуаплы сәркәтибе булып эшләгән. Һуңынан Башкомвузға уҡырға киткән һәм бер ҡасан да Стәрлебаш райкомының беренсе сәркәтибе булып эшләмәгән.

Стәрлебаш ауылына, имеш, Ҡазан яғынан килгән татарҙар нигеҙ һалған тип иҫбатларға маташыуы ла, Стәрлебаш районын «татар районы» тип күрһәтергә тырышыуы ла авторҙың дәрәжәһен арттырмай, киреһенсә, Стәрлебаш башҡорттарының намыҫына тейә, асыуын ҡуҙғата. Шуның өсөн дә матбуғатта авторға ҡарата кире ҡараш барлыҡҡа килде. «Башҡортостан» гәзитендә баҫылған мәҡәләһен Стәрлебаш районы Мәксүт ауылы кешеһе М.Әһлиулин «Дөрөҫ яҙылмаған тарих шик тыуҙыра» тип юҡҡа ғына атамаған.

Автор менән фәнни бәхәскә кермәй, шуны ғына әйтке килә: хәҙерге Стәрлебаш районы ере — ул юрматы башҡорттарының ере. Юрматы — башҡорттарҙың иң боронғо ырыуы, унын меңәр йыллыҡ тарихы бар. Бөгөнгө көндә район ауылдарының этник составы ниндәй генә булмаһын, уларға юрматылар нигеҙ һалған, ә мишәрҙәр, татарҙар һәм башҡалар күсеп килеп ултырған. Стәрлебаш ауылына юрматы һәм мең ырыуҙары кешеләре нигеҙ һалған, ә типтәрҙәр һәм мишәрҙәр күсеп килеп ултырған. Юрматыларҙың, меңдәрҙең нәҫелдәре, тоҡомдары бөгөн дә шул ауылдарҙа көн күрә, тик улар ассимиляцияға дусар булған, килмешәктәр менән буталып туған телдәрен юғалтҡан. Хәҙерге ваҡытта районда 30-ҙан ашыу башҡорт ауылы бар. Тарихи дөрөҫлөктө йәшерергә маташыусыларға мөрәжәғәт итеп, Лев Толстой тағы былай тип әйткән: «Мало того, чтобы прямо не лгать, надо стараться не лгать отрицательно — умалчивая».

Шул уҡ 2000 йылда нәшер ителгән һәм Мәләүез районы тарихына бағышланған тарихи һәм информацион йыйынтыҡ — «Мәләүез ере: үткәндәр, бөгөнгө көн, киләсәк көндәр». Йыйынтыҡтың авторы билдәле журналист Зәйнетдин ағай Рафиҡов. Был йыйынтыҡта ла етешһеҙлектәр етерлек. Миҫал өсөн алтынсы бүлекте алып ҡарайыҡ һәм унын төҙөлөшөнә иғтибар итәйек. Бүлек «Ирекләккә юл» тип атала. Бүлектең башында Мәләүез районында совет власын урынлаштырыу тураһында һүҙ бара. Бүлектең икенсе өлөшө «Ревком рәйесе М.Спиридоновтың туғандары», өсөнсө өлөш «Был хәл Зиргәндә булды», дүртенсе өлөш «Көрәш өсөн биргән ғүмер», етенсе бүлек «Данлыҡлы үҙгәрештәр йылдары» тип атала. Бүлектә һүҙ граждандар һуғышынан алып Бөйөк Ватан һуғышына хәтле районда булып үткән ваҡиғалар тураһында бара. Ләкин автор 1921 һәм 1932—1933 йылдарҙағы аслыҡты «күрмәй» үтеп киткән. Коллективлаштырыу һәм репрессия ҡорбандары тураһында ла йыйынтыҡта бер һүҙ ҙә юҡ.

2000 йылда Ҡариҙел, Күгәрсен һәм Хәйбулла райондары тарихтары донъя күрҙе. Уларҙы историзм принциптарына таянып, тарихты яҙыу, йәмғиәттең үҫеш ҡанундарына таянып, етерлек фәнни кимәлдә профессиональ тарихсылар яҙған.

Араларынан Күгәрсен районы тарихы китабы үҙ кимәле менән айырылып тора. Уны 13 автор ижад иткән. Араларында республикабыҙҙың күренекле ғалимдары бар. Улар район тарихын ентекләп тикшергәндәр, архивтарҙа һаҡланған материалдарҙы өйрәнгәндәр һәм китапты тик архив материалдарына һәм башҡа ентекләп тикше-

релгән материалдарға таянып яҙғандар. Бөтә тарихи ваҡиғаларҙы улар үҙ урындарына урынлаштырған, район тарихын Башҡортостан тарихына яраҡлаштырып дәүер, осорҙарға дөрөҫ итеп бүлгән һәм тарихи ваҡиғаны аңлатып бирергә тырышҡан. Авторҙар райондан сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең фотоһүрәттәрен ҡыҫҡаса ғына биографик белешмәләр менән бергә оҫта итеп урынлаштырған. Иң мөһиме, улар тарихи дөрөҫлөккә хыянат итмәгән, бер ваҡиғаны ла «онотоп» төшөрөп ҡалдырмаған, тарихи ысынбарлыҡты йәшереп маташмаған.

Ҡариҙел һәм Хәйбулла райондарының тарихтары ла профессиональ кимәлдә яҙылған. Ҡариҙел районы тарихын тарихсы Рәмил Рәхимйән улы Аҫҡаров, ә Хәйбулла районыныҡын тарихсы Рәшит Ғимат улы Насиров яҙған. Ике автор ҙа үҙ райондары тарихын намыҫлы, инабатлы рәүештә өйрәнгән һәм тарихи дөрөҫлөккә тоғро булып ҡалған. Күрһәтелгән китаптарҙың өсөһөн дә башҡорт телендә лә нәшер итергә кәрәк.

2001 йылда Мәсетле районы тарихы донъя күрҙе. Китап «Тарих яҙыр инем ташына» тип атала. Китаптың авторы 35 йыл ғүмерен мәктәптә уҡытыу эшенә арнаған тәжрибәле мөғәллимә, географ һәм тарихсы Ғәйникамал Әкрәм ҡыҙы Мирхәева-Абдуллина. Китап өҫтөндә эшләгәндә автор ижади ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыҡҡан. Ул һикһәнгә яҡын тарихи китапты һәм мәҡәләне ентекләп өйрәнеп, тикшереп сыҡҡан, район тарихына яраҡлы мәғлүмәттәрҙе һайлай алып, китап яҙғанда файҙаланған. Бынан тыш, китапҡа материал туплағанда автор оло йәштәге 68 кеше менән күрешеп әңгәмәләшкән, урындағы өс музей материалдарын киң өйрәнгән һәм китап яҙғанда файҙаланған. Шуның өсөн дә китапҡа «Башҡортостан тарихы»на һәм ғилми хеҙмәттәргә инмәй ҡалған материалдар ингән. Бындай материалдар Ҡариҙел, Күгәрсен һәм Хәйбулла райондары тарихтарында ла етерлек.

Китап матур итеп биҙәлгән. Унда егерменән ашыу фотоһүрәт, төрлө таблицалар, исемлектәр, ҡулланылған сығанаҡтар һәм хеҙмәттәр исемлеге, хатта ҙур булмаған башҡортса-русса һүҙлек тә урынлаштырылған.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, китап етешһеҙлектәрҙән дә азат түгел. Тарихи хаталар бигерәк тә икенсе бүлектә күҙгә ташлана. Мәҫәлән, китаптың 31-се битендә «Әхмәт ибн Фаҙлан» тип яҙыу урынына «Ғүмәр ибн Фаҙлан» тип яҙылған. 32-се биттә «Тажетдин Ялсығол әл Башҡорди Иштәк исемле башҡорт ханы булғанлығы хаҡында ла әйтеп үтә» тип яҙылған. Дөрөҫөндә иһә һүҙ башҡорттоң ике ханы тураһында барырға тейеш — ике мең ғәскәр башында торған Башҡорт хан һәм Иштәк хан тураһында.

Күрһәтелгән етешһеҙлектәр, әлбиттә, китаптың баһаһын кәметә алмай. Китапты әйләләр генә түгел, башҡа төбәктә йәшәгән тарихты һөйөүселәр ҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡып сығырҙар тип уйлайым.

Шулай итеп, киләсәктә район тарихын яҙырға баҙнат иткән кешеләргә, тимәк, мотлаҡ профессиональ тарихсы булырға кәрәк. Һәм, әлбиттә, китаптар нәшер ителер алдынан компетентлы белгестәр тарафынан ентекләп тикшерелергә тейеш, сөнки ундай әйбер һәр саҡ — фәнни хеҙмәт. Райондар, төбәктәр, ҡалалар тарихы — Башҡортостан тарихының айырып алғыһыҙ, тәбиғи өлөшө, һәм ул шик тыуҙырырға тейеш түгел.